*Рәмил ЙӘНБӘК*

# “Йондоҙ ише, йымылдаша йәндә Үткәндәрҙән калъан гөл-өмөт...”

## Донъям коршауы

Күңелһеҙлек.
Толҡа тапмай йәнем.
Сыбарлана уйҙар мейелә.
Тоноҡ көндәр — көҙгө йылан кеүек.
Башым эйелгәндән-эйелә.

Ниндәй ҡыҙыҡ ҡалды был донъяла?
Тегеһендә нисек? Ҡем белә...
Ҡыйыуһыҙ ел кереп сыға өйгә.
Ә баш эйелгәндән-эйелә.

Дөрөҫ тыуғанмынмы мин был ергә?
Дәүеренә микән тап киләм?
Сор-сор сорлай ҡаҙан сиңерткәһе.
Эй уфтанам.
Эйелеп-бөгөләм.

Ағастарым үҫә.
Йорт төҙөнөм.
Аша ҡарап тора улым да.
Тағы нимә кәрәк ир кешегә?
Башым сатнай, мәхшәр уйымда.

Ауын һуҙа тышта үрмәкселәр.
Гөрләп ишетелә ҡыр шауы.
Тормош дауам итә.
Минең генә
Сатнап бөткән донъям ҡоршауы.

## Беҙҙең әсәйҙәр

Юҡ, юҡ! Ҡеше булып йәшәмәне,
Ҡол булдылар беҙҙең әсәйҙәр.
Тыйнаҡ ҡына көлөп, тыйнаҡ булып
Аңыбыҙҙа һаман йәшәйҙәр.

Улар һәр саҡ көтөп көн күрҙеләр:
Башта — ирен, аҙаҡ — улдарын.
Ас көйөнсә ашлыҡ урҙы улар —
Заманының зарһыҙ ҡолдары.

Балаларын асҡа ҡаҡлап, улар
Үҙ һыйырын екте һабанға.
Ятып ҡалған башаҡ һуҡҡан өсөн
Үҙҙәре, их, ҡалды яманға.

Бер ус ашлыҡ өсөн уполномоч
Ун ҡатынды ҡуйған бикләтеп —
Мәңге ҡурҡыу һалып йөрәктәргә,
Күңелдәрен мәңге миктәтеп.

Шул замандан ҡалған хәүеф, ҡурҡыу
Әсәм зиһененән китмәне.
Шуғалыр ҙа, һис бер зарланманы,
Түрә һүҙен инҡар итмәне.

Тамам йығылғанса донъя көттө,
Көңгөр-ҡаңғыр итеп, үҙенсә.
Бөгөнгәсә баш эйәмен уға,
Унда булған рухи түҙемгә.

Юҡ, юҡ! Бер ҡасан да күрмәнеләр
Донъя рәхәтлеген әсәйҙәр.
Шундай сабыр, тыйнаҡ, изге булып
Күңелдәрҙә беҙҙең йәшәйҙәр
Заманыбыҙ ҡоло — әсәйҙәр...

## *Ауылыма мәҙхиә*

Башҡортостанда бер ауыл бар:
Шишмәләре еште сатната;
Ҡайтҡан һайын тағы һағындыра,
Бер йүгертә, берсә атлата.
Илдең генә түгел,

Ер шарының
Тартып ҡына торған төбәге.
Йылдар уҙа, әммә тынысланмай,
Уны көҫәп ярһый йөрәгем.

Бар йыһанда йондоҙ төҫлө балҡый
Иң яҡыным — тыуған Ҡайыбым.
Тоғролоғом талмаҫ һис бер ваҡыт,
Мөхәббәтем ҡалмаҫ һайығып.

Дауыт-Ҡайып — изге тыуған бишек,
Йөрәктәргә һин бит йәм генә.
Тарих һаҡлап, ғәзиз ауылҡайым,
Гөрләп йәшә мәңге, мәңгегә.

## *Талпыныу*

Ҡире һүрмә мине уйҙарымдан,
Инҡар итмә алһыу хыялды.
Ғажиз булдым юлым ҡамалыуҙан,
Тоғро күреп аҡыл тыйғанды.

Йондоҙ ише, йымылдаша йәндә
Үткәндәрҙән ҡалған гөл-өмөт.
Зар-сырмауҙан итәм ҡотолмаҡҡа,
Туҡтаталмаҫ һис бер бик, өгөт.

Шулай кәрәк, тиеп йәшәнем мин,
Әҙәп һаҡлап, хисем тымыҙҙым.

Тик хәтерҙән мәңге юйылманы
Буйы-һыны, моңо ул ҡыҙҙың.

Тәүәккәлдәр генә таш яра тип,
Баш ярмаҡсы булам ҡартлыҡта.
Ҡамауынан йылдар ысҡындырмаҫ
Әүәлге хис, тәүге сафлыҡты.

Ҡире һүрәм йәнә уйҙарымды,
Биккә тығам алһыу хыялды.
Ымһындырған йондоҙ балҡышынан
Өҫтөн, ахыры, аҡыл тыйғаны.

## *Хәбәр көтәм*

Шат сағыңда хәбәр ебәр миңә,
Шат булыуҙар һиңә килешә.
Телефоның оҙаҡ өндәшмәһә,
Мин хафаға төшәм, бирешәм.

Ауыр саҡта миңә шылтыратсы,
Уртаҡ булһын әрнеү, ғазаптар.
Йыраҡтарҙан һиңә иң ҡуйырмын —
Үкенестәр ҡалмаҫ аҙаҡтан.

Һағынғаның һайын хәбәр юлла,
Мин тойормон һинең һөйөүҙе,
Ниҙәр һиңә тынғы бирмәгәнен,
Һинең ниңә янып-көйөүҙе.

Һин борсолма минең тарафтарҙан
Шылтырау йә хәбәр булмаһа;
Ҡискә ҡаршы дауыл-фәлән ҡубып,
Ул таңын да әгәр тынмаһа.

Түҙә алмай һине һағыныуға,
Түҙә алмай эске ялҡынға,
Һинең янға тиеп юлға сығам:
Көҙгө рашҡы, ҡышҡы һалҡында.

Юлға сығам яҙғы юлһыҙ мәлдә,
Юлда булам йәйге селләлә.
Тик көт мине, иркәм, һағынып көт,
Йөрәк йылың ғына йәлләмә.

## *Мөхәббәткә яңы йыр*

Их, йәшәгем килә өр-яңынан,
Их, һөйәһем килә яңынан.
Теләктәрҙән телем телгә йоҡмай,
Хыялдарҙан йөрәк ярыла.

Беләм хәҙер ғишыҡ ҡәҙерҙәрен,
Ҡайнар хис баһаһы юғары.
Данлай беләм һөйөү нескәлеген —
Ҡасмам Пегасымды туғарып.

Уҙған йылдар, оҙон юлдар аша
Йөрәгемдә артҡан  сабырлыҡ.
Ошо сабырлыҡты һөйөүемә
Ап-аҡ япма итеп ябырлыҡ.

Беҙ икебеҙ япма-сымылдыҡта
Татырбыҙ ҙа ожмах ләззәтен —
Йыһан киңлегенә күтәрербеҙ
Мөхәббәтте ҙурлау ғәҙәтен.

Ер йөҙөнөң һәммә кешеләре,
Иркәм, шулай беҙҙән нур алыр.
Инде юғалһаҡ та — үкенесһеҙ:
Ҙур мөхәббәт,
Ошо йыр ҡалыр.

## *Бер нәмә лә ерҙә...*

Бер нәмә лә мәңге түгел ерҙә:
Урман, тауҙар, сикһеҙ далалар;
Беҙ йөрөгән юлдар, һалған өйҙәр,
Күккә ашып торған ҡалалар.

Бер нәмә лә мәңге түгел ерҙә:
Хис-тойғолар ҡала күмелеп;
Ҡыуыҡ һымаҡ, өмөт-хыял шартлай,
Һүнеп ҡала бәндә ғүмере.

Бер нәмә лә мәңге түгел ерҙә:
Йыйған байлыҡ,
Сәскән ғәйбәттәр;
Ҡон ҡайтарыу,
Шашыныуҙар ярһып,
Һөйөшөүҙәр,
Киргән ғәйрәттәр.

Бер нәмә лә мәңге түгел ерҙә:
Хаким, ҡанун... Китап-томлыҡтар...
Мәңгелектә һис иҫкермәй торған
Бөйөк ғали йәнәп —
Ваҡыт бар.

* * *

Беҙ ҙә арғымаҡ инексе:
Ел-дауылдар уйнатып,
Елдек йәшлек юлдарынан —
Мәңгелек тип уйланыҡ.

Мәңге түгел икән йәшлек —
Ғүмерҙең тик бер мәле.
Унда мәңгегә ҡалырға
Һис кем тапмай әмәлен.

Беҙгә лә йүгән кейелде,
Ауыҙлыҡтар сәйнәтеп.
Ошо тәҡдир һәр быуынға
Килеп тора әйләнеп.

Һабан һөрҙөк.
Муйындағы
Ҡамыттар шыпа еүеш.
Тәртәгә бикләй яҙмыштар —

Тормошта шулай тейеш.
Аҡыл керҙе сал баштарға,
Таныныҡ хаталарҙы.
Үкенес тулы ошо мәл
Ғүмер тип аталамы?!

Инде тиҙҙән, бик-бик тиҙҙән
Йүгәнде һалдырырҙар.
Хатта тәүләп — һәм мәңгегә! —
Тышауһыҙ ҡалдырырҙар.

Ул ирек хәҙер нимәгә?
Нимәгә йәшел болон?
...Унда еләә бүтән тайҙар,
Уйнаҡлай йәп-йәш ҡолон.

## *Заман талабы*

Күп күрелде инде был тормошта,
Йөрәктәргә шырау ҡаҙатып...
Ҡуйсы, күңел, бөгөн зарланмайыҡ,
Гел зарланыу — көсһөҙ аҙабы.

Беҙ бөгөндән башлап үҙебеҙгә
Яңы сифат, һыҙат алырбыҙ.
Уфтанмабыҙ йөрәк ҡыҫҡанда ла,
Ярһыр саҡта тыныс ҡалырбыҙ.

Беҙ, күңелем, заман талабына,
Ил һүҙенә ҡолаҡ һалайыҡ:
Ҡешеләр бит хәҙер шырмый түгел,
Бик талапсан хәҙер халайыҡ.

Ихтыяж бар:
Ҡыҫыҡ бил ҡайышын
Беҙ тағы ла ҡыҫып быуырбыҙ.
Беҙ эшләрбеҙ башты баҫып ҡына.
Беҙ ҡабаттан йыуаш булырбыҙ.

## *Өмөт*

Барлыҡ ғүмер, ахыры, — көтөп йәшәү:
Көн дә, көн дә ниҙер көтәһең.
Өмөттәрең күп саҡ бушҡа сыға,
Көтөктәр ҙә булып бөтәһең.

Бала саҡта ҙурайыуҙы көттөм,
Ниндәй алһыу ине хыялдар.
Эшләр эштәр менән аймылыштым,
Шул хыялды ғына тыялмай.

Көттөм, көттөм...
Өҙөлөп Уны көттөм
Илаһи ҙа яҙғы таңдарҙа.

Һуҡмаҡтарҙы яҙмыш яҙлыҡтырып,
Һемәйергә икән яҙған да.

Дон Кихоттың ел тирмәне менән
Алышҡаны төҫлө тормошом:
Ғәҙеллекте яҡлап етемлектән,
Ялған менән күпме һуғыштым.

Бер семтем дә үҙгәрмәне донъя.
Күп тә ҡалмай ғүмер һүтәһе.
Ә барыбер йәндә өмөт йәшәй,
Ә барыбер ниҙер көтәһең...

* * *

Һуңғы япраҡ йолҡоп ел һыҙғыра —
Шундай ҡотһоҙ, йонсоу көҙ мәле:
Оло итек менән көләпәрә
Ҡейеп кенә ҡырҙа йөрмәле.

Ямғыр ҡатыш аҡ яуындар яуа —
Сирҡандырғыс ошо көҙ мәле:
Ҡоштар менән осҡас аҡ хыялдар,
Һағыштарға нисек түҙмәле?..

Ласҡаҡ ерҙе боҙ ҡоршауға төрҙө —
Сикһеҙ ҡырҡыу икән көҙ мәле:
Күкрәктәргә тулған моңһоулыҡты
Бары йөрәк кенә һиҙмәле.

Йәйҙәр үтте, яҙҙар бик-бик алыҫ —
Ҡышҡа илтер инде көҙ мәле.
Бәндәләрҙең яҙы ике булмай —
Ошоноһо йәнде иҙмәле.

